Тамара ЮЛДАШЕВА

# «Һиндә үҫәм, бер гөл кеүек, ерҙән һут алып...»

Сөгөрмәкләнеп аҡҡан Дим, Өршәк йылғалары, риүәйәттәргә бай данлы Асылыкүл ярҙарын төйәк иткән халыҡ менән танышыу теләге күптән йәшәй ине күңелдә. Ер-һыуына ҡарап, кешеләрҙең дә холҡон, донъяға ҡарашын, үҙаңын билдәләп була бит.

Был яҡтарҙа егәрле, булдыҡлы, тормошто һөйөүсән халыҡ йәшәй. Ялан-баҫыуҙарҙа дәртләнеп эшләй ҙә, күңелдәрҙе елкендереп ял да итә белә улар. Йыр-бейеүгә лә маһирҙар, сәсәнлектә лә ал бирмәйҙәр. Бик күп таланттарҙы, республикаға билдәле шәхестәрҙе тәрбиәләгән төбәк ул Дәүләкән.

Сәсән тигәндән, тағы ла бер һынамыш: яҙыусыһы ниндәй, халҡы ла шундай. Дәүләкәндәр ниндәй уй-хыялдар менән йәшәй, күңел торошо нисегерәк уларҙың? Ошондай уйҙар менән астым «Дим тулҡындары» китабын. Арҙаҡлы яҡташтары, Салауат Юлаев исемендәге дәүләт премияһы лауреаты, Башҡортостандың халыҡ яҙыусыһы Әхиәр Хәким үҙе ҡанат ҡуйған «Дим» әҙәби берекмәһе ағзаларының шиғри әҫәрҙәре тупланған унда. Ҡулға тотоп ҡарарлыҡ тос йыйынтыҡ әҙерләнеүе — үҙе үк ҙур ҡыуаныс һәм оло әҙип иҫтәлегенә хөрмәт билдәһе ул.

*"Дим" әҙәби берекмәһе ағзалары тәүге йыйынтыктың исем туйында*



Еләк еçе аңҡып тора,
Уңған тәмле мәтрүшкә.
Билдән үçкән ҡуйы үлән —
Һарут, һутлы кәрешкә.
Һөйгән йәрем бесән саба,
Маһир үҙе бар эшкә.
Эргәһендә бакуй теҙә
Ике улым — фәрештәм, —

тигән юлдарҙан ниндәй тормош көсө, илһамлы дәрт бөркөлөп тора. Ҡоръятмаç мәктәбе уҡытыусыһы Миңзәлә Хәлилованың «Бесәндә» шиғырынан улар. Миңзәлә үҙе Баймаҡ районының тауҙар ҡуйынына һыйынып ултырған Байыш ауылында тыуып үçкән. Байыш һигеҙ йыллыҡ мәктәбе, Сибай интернат-мәктәбе, Башҡорт дәүләт университетының филология факультетында алған белемен бына нисә йыл инде балалар уҡытыуға һала. «Байраҡ» гәзите үткәргән «Минең ерем» конкурсында шиғырҙары беренсе премияға лайыҡ тип табылған. Бәләбәй ҡалаһында үткәрелгән республика шиғриәт фестивалендә ул III дәрәжә диплом менән бүләкләнгән. Дәүләкән район типографияһында «Аҡ елкән» исемле китабы донъя күргән. «Мөхәббәтле өй» шиғырындағыса, илһамланып тормошто һөйгән шағирә өсөн бөтә донъя мөхәббәтле. Шуға ла уның шиғырҙары кешелекле, әçәрҙәренең лирик геройы ышандыра, ул һәр кемгә таныш, яҡын.

Шуныһы ғәжәпкә ҡалдыра: Дәүләкән тәбиғәтенең баçалҡы моңон, илһамлы дәртен Баймаҡ ҡыҙы нисек тойомлап, ҡағыҙға төшөрә алған? Бөрйән районының Яңы Монасип ауылында тыуып, урта белемде Өфө ҡалаһында, һуңынан Күмертауҙағы 2-се интернат-мәктәптә алған Гөлүзә Арыçланованың ижады ла шундай уҡ уйҙар тыуҙыра.

Тыуған-үçкән ергә ҡарағанда,
Төшкән ерең ҡәҙерлерәк, тиҙәр, —

тип яҙа ул үҙе был турала.

«Дәүләкән» телекомпанияһында хәбәрсе булып эшләгән, 1999 йылда Бәләбәйҙә үткәрелгән «Илһам шишмәләре» фестивалендә лауреат исеме алған Гөлүзә Арыçланова әле Башҡортостандың халыҡ яҙыусыһы Әхиәр Хәкимовтың Мемориаль йорт-музейы директоры вазифаһын башҡара.

Мөғжизәле көндәр, аһәңле төндәр илендә йәшәй Гөлүзә Арыçланованың илһам ҡошо. «Һандуғас моңо» шиғырындағы «Эй һайраны ҡошсоҡ, эй һайраны, көйгә һалып бөтә моң-зарын» тигән юлдар авторҙың үҙ ижады хаҡында әйтелгәндәй. Үҙе бер һандуғас һымаҡ, йыр-моңон урғылдырып, һәр шиғырын көйгә һалып, йырлап та күрһәтә Гөлүзә. Ҡатын-ҡыҙ булмышын, әсә йөрәген (өс бала әсәһе ул) бар нескәлектәрендә асып һала.

Тәнзилә Юсееваның лирик геройы ла ауырлыҡтарҙы еңеп алға барыусы һүнмәç-төңөлмәç рух эйәһе булып күҙ алдына баçа. Ул Дәүләкән ҡыҙы. «Әсәйемдең еләк йыйғанда йырлаған йырҙарын, атайымдың утһыуҙарҙы үтеп, Еңеү көнөн ҡаршы алыуы тураһындағы хәтирәләрен

күңелемә һеңдереп, яҙын Димемдә ҡайҙалыр ашҡынған боҙҙарҙы оҙатып, тыуған яҡтарын һағынып ҡайтҡан сыйырсыҡтар моңон тыңлап, Шәфи күлендәге ап-аҡ томбойоҡ сәскәләре менән һөйләшеп, серләшеп үҫтем мин», — тип яҙа ул үҙе хаҡында. Тәнзилә Юсеева Стәрлетамаҡ педагогия институтын тамамлап, Асылыкүл буйында урынлашҡан Ҡыҙрас ауылында 30 йыл инде рус теле һәм әҙәбиәтен уҡыта. Балалар өсөн шиғырҙары табыштарға бай — сабыйҙар күңелен яҡшы аңлай биш бала әсәһе, хәҙер инде өләсәй шағирә.

Рәмил Фәйзуллин да төп ошо яҡ кешеһе, Ҡоръятмаҫ ауылында тыуып үҫкән. Башҡорт дәүләт университетын тамамлағас, оҙаҡ йылдар мәҙәниәт хеҙмәткәре, уҡытыусы булып эшләй. Ул һәр саҡ шиғриәткә, йыр-моңға ғашиҡ кеше. Рәшит Назаров, Рәми Ғарипов, Мостай Кәрим әҫәрҙәрен сәғәттәр буйы яттан уҡый ала. Тыуған яғына, риүәйәттәрҙә телгә алынған Асылыкүлгә, Һыуһылыу сәсен тараған Мейесташҡа ғашиҡлығы уға йәшәүгә көс-дарман бирә, шиғри юлдар теҙергә илһамландыра.

Тормош тураһында фәлсәфәүи уйланыуҙар, донъяға һынап та, яратып та бағыу менән һуғарылған шиғырҙар авторы Гөлшат Саматова хаҡында айырып әйтеп китергә була. «Йәшлек» гәзите хәбәрсеһе, йәш шағирә Лариса Абдуллинаның әсәһе ул. Донъяға ғашиҡлығын, шиғриәткә һөйөүен ҡыҙына ла тапшырыуы, шағирә тәрбиәләп үҫтереүе менән икеләтә бөйөк бурысты атҡарған.

Шиғырҙарында тәбиғәт, ауыл тормошо, кеше яҙмыштары сағылдырылған. Республика һәм район матбуғатында улар күренгеләп тора. Тел, һүҙ менән эшләү — автор өсөн үҙе бер йыуаныс. Телдең ҡәҙерен белә, һүҙҙең ҡиммәтен аңлай Гөлшат Саматова.

Һүҙ менән етди кимәлдә, профессиональ рәүештә эшләүгә ынтылыш шулай уҡ Гөлфирә Ғәскәрова ижадында ла сағыла. Йәмле Өршәк буйында, Ауырғазы районы Усман ауылында тыуған ул. Урта белемде Ишембайҙа, һуңынан Өфөләге 1-се республика мәктәп-интернатында (хәҙер Р.Ғарипов исемендәге 1-се республика гимназияһы) ала. Башҡорт дәүләт университетының сит ил телдәре факультетын тамамлай. Дәүләкән район гәзитендә эшләй. Хәҙер район хакимиәтенең мәғлүмәт-аналитик бүлеге хеҙмәткәре. Шиғриәттән бигерәк, прозаға, тәржемә эшенә тартыла уның күңеле. Уйсан, талапсан автор ул Гөлфирә.

Телгә профессиональ ҡараш райондың «Байраҡ» гәзите хеҙмәткәре Әлиә Уразбахтинаға ла хас. Ул Яңы Йәнбәктән. Башҡорт дәүләт университетын тамамлаған. «Илһам сығанағы ҡайҙан килә? Иң беренсе сиратта ябай ғына нәмәлә оло мәғәнә күреүҙәндер, башҡалар күрмәгәнде шиғыр юлдарына һала белеү һәләтенәндер», — ти ул. Тормошта һәр кем татыған аһ-зар, ауырлыҡтар алдында юғалып ҡалмай, үҙ юлын табып, алға барырға тырыша Әлиәнең лирик геройы. Көлкө-юмор ҙа уға ят түгел. Шаян шиғырҙар ҙа, бәйеттәр ҙә уның ижадын жанр йәһәтенән байыта.

Олоғайғас шиғыр яҙа башланым, тип көлдөрҙө «Дим тулҡындары» йыйынтығы презентацияһында тамашасыларҙы Фәнүр Низаметдинов. Өфө йылға училищеһын тамамлап, машинист һөнәрен үҙләштереп, хеҙмәт

юлын Өфөлә башлай ул. Әммә бәләкәйҙән йыр-моңға ғашиҡ егетте сәхнә үҙенә әйҙәй һәм, 1961 йылда баянсылар курсын тамамлап, Фәнүр Миңнеяр улы тәүҙә тыуған Ҡоръятмаҫ ауылында, Алғала, һуңынан Ишембай ҡалаһында мәҙәниәт өлкәһендә мауығып эшләй. Оҙаҡ йылдар Ишембай быраулау конторaһында, Дәүләкән электр һәм йылылыҡ селтәрендә көс түгеп, хаҡлы ялға сыға. Бына шул саҡта ғына шиғри әҫәрҙәр, хикәйәләр яҙыуға тотона. Фәнүр Низаметдинов ижадында шуға ла олпатлыҡ, тормош тәжрибәһе сағыла.

Ғүмерҙең ҡәҙерен белеү хисе яралтҡан ижад емештәре тип Земфира Атанғолова шиғырҙарын да атап булыр ине. Шиғырҙарын үҙе көйгә һалып, йыр итеп башҡара автор. Дәүләкән ҡалаһында тыуған. Бәләбәй педагогия училищеһында, ситтән тороп Башҡорт дәүләт университетының тарих факультетында уҡый. Башҡортостан уҡытыусыларының белемен камиллаштырыу институтында (хәҙерге Башҡортостан мәғарифты үҫтереү институты) методист булып эшләгән, хаҡлы ялға тиклем Өфөләге 99-сы мәктәптә башланғыс синыфтарҙа белем биргән. «Донъя мәшәкәттәренә ижад аша ҡарайым, — ти ул. — Матур тәбиғәтле тыуған тупраҡ көс-ҡеүәт, илһам бирә».

Зөләрәм Тугашева (Снегирева) ижады халыҡсанлығы менән айырылып тора. «Урал батыр» эпосын яттан башҡарыусылар, ҡобайырсылар бәйгеһендә ҡатнашып, аһәңле шиғри юлдары менән тамашасылар хәтерендә ҡалғайны ул. Был альманахта ла тыуған ергә, Салауат батырға арналған ҡобайырҙары, шиғырҙары урын алған. Зөләрәм Тугашева Әлшәй районы Бәләкәй Аҡколай ауылынан. Раевкалағы 1-се интернат-мәктәптә, Башҡорт дәүләт университетының филология факультетында уҡыған. Әле Дәүләкәндә 3-сө урта мәктәптә әсә теленән белем бирә. «Өләсәйемдең йылы ҡосағында иркәләнеп үҫтем. Ул беҙҙең өсөн бөтмәҫ бер «хазина» ине. Төндәр буйы һөйләгән мауыҡтырғыс әкиәттәрен, бәйеттәрен, мөнәжәттәрен, йырҙарын тыңлап үҫтем. Халыҡ ижады ҡомартҡыларына, әҙәбиәткә булған тере һөйөү орлоҡтарын ул сәсте», — тип хәтерләй Зөләрәм Рәүеф ҡыҙы. Ысынлап та, телебеҙҙе ҡәҙерләп һаҡлауҙа әсәйҙәр, өләсәйҙәр тәрбиәһе бик мөһим шул!

«Дим тулҡындары» шиғри йыйынтығына әҫәрҙәре ингән авторҙар араһында Ҡоръятмаҫ ауылынан сығыусылар күп. Ҡоръятмаҫ үҙе бер әҙәби шишмә башы икән, тигән фекер ҙә килеп ҡуя. Ошо ауылда тыуған Ғәлимйән Шәйәхмәтовтың ижады республика матбуғатында байтаҡтан уҡ күренгеләп тора. Ул Дәүләкән педагогия училищеһын, К.А.Тимирязев исемендәге Башҡорт дәүләт педагогия институтын тамамлаған. Өфөлә, Ҡазанда юғары партия мәктәбендә уҡыған. Һуғыш осоронда, унан һуңғы йылдарҙа колхозда эшләгән, мәктәптә, медицина һәм техник училищеларҙа, киске университетта уҡыған. Күп йылдар Туймазы ҡалаһында партия һәм совет органдарында эшләгән. Башҡортостандың көнбайыш төбәгендә, Туймазыла, беренселәрҙән булып «Урал» башҡорт халыҡ үҙәгенең филиалын ойоштора һәм уның тәүге рәйесе була. I һәм II Бөтә донъя башҡорттары ҡоролтайҙары делегаты ла ул.

Ғәлимйән Шәйәхмәтов шиғырҙар, хикәйәләр яҙа. Публицистик әҫәрҙәре, тарихи хеҙмәттәре байтаҡ. Алты китабы донъя күргән. Әлеге альманахҡа тыуған яғына арналған шиғырҙары ингән.

Тормош ҡануны шундай: ул туҡтауһыҙ үҙгәрештә, үҫештә. Оло быуын ниндәй генә аҡыл тупламаһын, үҙенән һуң килгән быуынға тәжрибәһен, өмөтөн, уй-тойғоларын тапшыра алмаһа, уның киләсәге юҡ. Дәүләкәндәге «Дим» әҙәби берекмәһендә ошоно яҡшы аңлап эш итәләрҙер, күрәһең. Ижадсыларҙың күңелен нурлап, яҡтыртып, унда йәш әҙәбиәтселәр тәрбиәләнә. Олеся Әхмәтрәхимоваға әле ни бары ун һигеҙ йәш. Ул инде алты йәшендә үк район фестивалендә сығыш яһап, Маҡтау грамотаһы алған. «Йәшлек» гәзитендә шиғырҙары донъя күргән. Иленә, тыуған еренә ул былай тип өндәшә:

Һиндә үҫәм, бер гөл кеүек, ерҙән һут алып,
Ал таңда ҡояш нурына сикһеҙ ҡыуанып.

Олесяның шиғырҙарында тормошҡа, кешеләргә, донъяға рәхмәтле була белеү тойғоһо ярылып ята. Уйлай китһәң, йәшәйеш өсөн иң мөһим сифаттарҙың береһе бит ул — рәхмәтле була белеү. Мостай Кәрим бер интервьюһында «Кешеләге Һеҙ ихтирам иткән иң төп сифатты әйтһәгеҙсе?» тигән һорауға: «Рәхмәтле була белеү», — тип яуап биргәйне. Олеся Башҡорт дәүләт университетына уҡырға ингән, уға ҙур уңыштар теләйек, ҙур киләсәк юрайыҡ.

Шулай итеп, «Дим тулҡындары» (Дәүләкән ҡала типографияһы, 2006) йыйынтығы халыҡтың рухы йәшәүен, хатта сәскә атыуын дәлилләй.

«Дим» әҙәби берекмәһе үҙенең йәшәйешен йәнләндереп, төрлө ҡыҙыҡлы саралар үткәреп тора. Уҡыусылар араһында викторина булһынмы, Әхиәр Хәким ижадына арналған шиғырҙар конкурсымы — бөтәһе лә Дәүләкән районы мәктәптәре араһында сәмле ярыш төҫөн ала. «Дим тулҡындары» йыйынтығының презентацияһы ла күп уҡыусыларҙы, уҡытыусыларҙы, мәҙәниәт хеҙмәткәрҙәрен йыйҙы. Башҡорт дәүләт университеты профессоры, филология фәндәре докторы Мирас Иҙелбаев, М.Ғафуриҙың Мемориаль йорт-музейы директоры Фәнис Янышев берекмә ағзалары ижады хаҡында үҙ фекерҙәрен әйтеп, тәҡдимдәре менән уртаҡлашты.

Тормош тәжрибәләре төрлө булған кеүек, авторҙарҙың ижад емештәре лә төрлө, һәр ҡайһыһы үҙенсәлекле. Кемдер шиғриәткә ауыр ғүмер юлын үтеп килә, кемдеңдер әле саф, рыяһыҙ сабый күңелен илһам осҡондары балҡыта. Бының шулай булыуы бик шатлыҡлы. Берекмә ағзалары ижадында йәштәрҙең дә көслө тауыш биреүе киләсәккә өмөт уята. Был яҡ халҡының шиғри күңеле, тәрән Дим ағымылай, яңынан-яңы балҡыштары, асыштары менән йәнде әйҙәр, туған телебеҙҙе байытып, көс-ҡеүәтен арттырыр, тигән ныҡлы ышаныс тыуҙыра.

*Дмитрий МАКИША фотоһы.*